*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# Башҡортостан – Һарытау: дуҫлыҡ нығый, хеҙмәттәшлек киңәйә

Сәнәғәтте, иҡтисадты үҫтереү һәм ил-йорттоң көнитмешен яҡшыртыу, халыҡтың генофондын һәм һаулығын һаҡлау, милләттең үҫеш-үҙгәреше, демографияһы, рухи тормошо һәм торошо... Йәшәйешкә бәйле был мөһим мәсьәләләрҙе күҙ уңынан ысҡындырмай, Башҡортостан Республикаһы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты башҡорттар йәшәгән башҡа төйәктәр менән күп яҡлы бәйләнештәрҙе нығыта, республиканан ситтә йәшәгән ҡәрҙәштәр тураһында хәстәрлек күрә. Беренсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайынан һуң Һарытау өлкәһе башҡорттары менән дә бәйләнештәр киңәйҙе, осрашыуҙар йышайҙы. Оло Ырғыҙ, Кәмәлек буйҙарына ғалимдар, яҙыусылар, артистар, рәсми кешеләр йышыраҡ бара башланы.

Тыуған яғын өйрәнеүселәр Юрий Бычков һәм Фрид Рәшитов ”Кәмәлек башҡорттары” китабында яҙыуҙарынса, XIX быуаттың икенсе яртыһында — XX быуат башында Ырғыҙ һәм Кәмәлек буйындағы башҡорт ерҙәре Һамар губернаһына ҡараған. Бер-береһенән йөҙ саҡырым самаһы ғына арауыҡта ғүмер иткән Ырғыҙ һәм Кәмәлек башҡорттары тығыҙ аралашып, туғанлашып йәшәгән, ғәмәлдә бер этник төйәк төркөмөн тәшкил



иткән. XIX быуат аҙағында был төркөм ун мең кешенән ашып киткән. XX быуаттың егерменсе-утыҙынсы йылдарында үткәрелгән реформанан һуң Ырғыҙ (әүәлге Имел олоҫо), Кәмәлек (элекке Күҙәбай олоҫо) башҡорттары күрше ике өлкәлә — Куйбышев һәм Һарытау өлкәләрендә булып сыҡҡан. Олоҫтар бөтөрөлөп, райондар барлыҡҡа килгәс, башҡорт ауылдары төрлө райондар ҡарамағына күскән. Бүлгеләү Ырғыҙ—Кәмәлек башҡорттарының мәҙәни-этник үҫешенә, һис шикһеҙ, кире йоғонто яһаған.

Башҡорт халҡының, ил-йортоноң айырылмаҫ төркөмөн тәшкил иткән Ырғыҙ—Кәмәлек башҡорттары айырылған, бүленгән, милли үҙенсәлектәренән, теленән яҙыуға дусар ителгән, Ғабдулла, Ишембай (Юлдаш), Әлим, Әмин, Ураҙай (Ҡыпсаҡ), Аҡир ауылдары бөткән. Мәгәр һәммәһе лә юғалмаған. Кәмәлек буйында Байғудин (Байгилдин, Һарыш), Күсембәт (Ҡатай), Күҙәбай (Ҡаһарман), Ҡунаҡбай (Бөрйән), Мәксүт (Бишул), йәнә Селекле йылғаһы буйында Бобров Гай (Бегенәш, Ҡондоҙло) ауылдары һаҡланған. Бында йәшәгән ҡәрҙәштәребеҙҙе тергеҙеү, уларҙың милли аңын уятыу, рухын күтәреү мөһим ине. Шул маҡсаттан 1995 йылдың ноябрендә Башҡортостан делегацияһы Һарытау өлкәһенә сәфәр ҡылды, Перелюб районы хакимиәте етәкселәре, урындағы халыҡ менән осрашты, артистарыбыҙ башҡорт ауылдарында концерттар ҡуйҙы. Кәмәлек башҡорттарының телен, мәҙәниәтен тергеҙеү, балаларын туған телдә уҡытыу буйынса фекерҙәр әйтелде, мәгәр ниәттәрҙе бойомға ашырыу өсөн әүҙемлек, оҙаҡ йылдар талап иткән даими ныҡышмалы эш кәрәк ине.

Кәмәлек башҡорттарын милли-мәҙәни йәһәттән тергеҙеү көн үҙәгенән төшмәне. 2002 йылдың 27 мартында Перелюб ауылында Һарытау башҡорттарының өлкә ҡоролтайы үткәрелде. Унда Перелюб, Пугачев, Балаков районларынан, Һарытау, Энгельс ҡалаларынан йөҙҙән ашыу делегат ҡатнашты. Улар социаль-иҡтисади һәм рухи үҫеш өсөн шарттар тыуҙырыу, Кәмәлек башҡорттарының булмышын, милли йөҙөн, әхлаҡ-әҙәп ҡанундарын һаҡлап ҡалыу зарурлығы тураһында сығыш яһаны. Ҡоролтайҙа халҡыбыҙҙың асылына һалынған аҫыл сифаттарҙы тергеҙеү, үҫтереү өсөн мәктәптәрҙә балаларҙы башҡортса уҡытырға, йәштәрҙе Башҡортостандың уҡыу йорттарына ҡабул итергә, милли кадрҙар әҙерләргә, башҡортса сыҡҡан гәзит-журналдар алдырырға, китапханаларҙы башҡорт китаптары менән тулыландырырға, мәсеттәр төҙөргә ҡарар ителде. Улар ғәмәлгә ашһын өсөн эшлекле осрашыуҙар, аралашыуҙар йышайҙы, 2003 йылда Башҡортостан Республикаһы менән Һарытау өлкәһе араһында дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлдө һәм ул үҙ-ара мөнәсәбәттәр үҫешенең хоҡуҡи нигеҙенә әйләнде. Ике яҡтың вәкилдәре Һарытау өлкәһе Хөкүмәтендә осрашып, килешеүҙе бойомға ашырыу буйынса протоколға ҡул ҡуйҙы. Унда сәнәғәт, энергетика, төҙөлөш, ауыл хужалығы, мәҙәниәт, мәғариф, һаулыҡ, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау өлкәләрендә комплекслы саралар билдәләнде. Уларҙы ғәмәлләштереүҙә тиҫтәләгән предприятиелар һәм ойошмалар, дәүләт власы органдары, йәмәғәт ойошмалары ҡатнашты. Төбәк-ара хеҙмәттәшлекте уңышлы алып барыу, үҙ-ара килешеп, аңлашып эшләү өсөн 2004 йылдың декабрендә Һарытау өлкәһендә Башҡортостан Республикаһының вәкиллеге асылды.

Төбәк-ара бәйләнештә сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник һәм мәҙәни хеҙмәттәшлек мөһим урынды биләй. 2003 йылдан тауар әйләнеше 28

процентҡа артты һәм 2005 йылда 1 миллиард 100 миллион һум тәшкил итте. Һарытау өлкәһендә Башҡортостандың нефть эшкәртеү, нефть химияһы һәм химия, металл, ағас эшкәртеү предприятиелары етештергән тауарҙар ҙур һорау менән файҙалана: авиация бензины, дизель яғыулығы, мазут, кальцинацияланған сода, синтетик каучук, көкөрт, ҡара металл прокаты, тәҙрә быялаһы, ағас плита, ҡатырға, электр лампалары... Һарытау өлкәһенән иһә Башҡортостанға трактор прицептары, төрлө подшипниктар, һыуытҡыстар, медицина техникаһы, аэрокосмос сәнәғәте ҡорамалдары, кондитер ниғмәттәре һәм башҡа күп нәмәләр килә.

Башҡа өлкәләрҙә лә хеҙмәттәшлек даирәһе киңәйә. Башҡортостан Республикаһының Тәбиғи ресурстар министрлығы һәм Һарытау өлкәһе Хөкүмәте эргәһендәге Тәбиғи ресурстар һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау комитеты радиоактив матдәләрҙе һәм ҡалдыҡтарҙы иҫәпкә алыу һәм контролдә тотоу тәңгәлендә эштәрҙе ойоштороу буйынса фекер алыша, тәжрибә уртаҡлаша. Ер төҙөлөшө органдары дәүләт ер кадастры, ер контроле, уларҙы алып барыуҙы мәғлүмәт-техник яҡтан тәьмин итеү өлкәһендә үҙ-ара аралаша. Төҙөлөш, архитектура һәм транспорт министрлыҡтары төҙөлөш мәсьәләләре буйынса фәнни-техник һәм оператив мәғлүмәттәр менән алмаша.

Фән, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт, әҙәбиәт, спорт һәм туризм мөхитендә лә йәнлелек. 2005 йылдың йәйендә Башҡортостан делегацияһы ”Һарытау һабантуйы” халыҡ байрамында ҡатнашты. Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы көнөндә Өфөлә Һарытау башҡорттары ҡоролтайы күргәҙмә-күренеше күңелдәргә хуш булды. 2006 йылдың йәйендә иһә Һарытау өлкәһендә Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллығына бағышланған башҡорт мәҙәниәте көндәре үтте.

Башҡортостандың һәм Һарытауҙың юғары уҡыу йорттары, ғилми-тикшеренеү институттары ғалимдары фәнни-ғәмәли конференцияларҙа йыш осраша, фекер алыша. Һарытау башҡорт йәштәре Башҡортостандың юғары, урта уҡыу йорттарына, балалары гимназияларға уҡырға ҡабул ителә. Өфөнө яҡын итеп, үҙ күреп, эшкә, йәшәргә ҡалалар, тарихи төйәктәренә һыйыналар.

Ике төйәктең йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм буйынса дәүләт органдары ла эшмәкәрлектәренең төп йүнәлештәре буйынса даими рәүештә фекер алыша, берлектәге саралар — күнегеүҙәр, күнекмәләр, ярыштар үткәрә. Еңел атлетика, йөҙөү, ҡушлап ишеү, фехтование, милли көрәш буйынса юғары класлы спортсылар әҙерләү тәжрибәһе өйрәнелә. Туристик фирмалар тығыҙ бәйләнештә эшләй, ҡыҙыҡлы һәм танып белеүгә ҡоролған сәйәхәттәр ойоштора. Башҡортостандың хозур тәбиғәте, Ирәмәле, Шүлгәнташы, Янғантауы илгиҙәрҙе хайран итә, шифаханалары һаулыҡтарын нығытырға теләүселәрҙе тартып тора. Һәр йәһәттә лә берлектәге хеҙмәттәшлек, эшмәкәрлек ил-йорттоң, халыҡтың мәнфәғәтенә, күркәм, хөр йәшәйешенә булышлыҡ итә.

2006 йылдың 13—14 сентябрендә Һарытау өлкәһе министрлыҡтары, ведомстволары, хужалыҡтары һәм башҡорт йәмәғәтселеге вәкилдәре губернатор Павел Ипатов етәкселегендә Башҡортостанға сәфәр ҡылды. Төп маҡсат — ике яҡлы хеҙмәттәшлекте артабан үҫтереү. Ҡунаҡ-

тар милли батырыбыҙ Салауат Юлаев һәйкәленә сәскәләр һалды, рәсми вәкилдәр оҙатыуында Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуына 450 йыл тулыу уңайынан төҙөлгән Халыҡтар дуҫлығы йортон, Башҡортостан Республикаһының Милли музейын, ”Ләлә-Тюльпан” мәсетен ҡараны, Өфө ҡалаһы, уның предприятиелары менән танышты.

Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов Республика йортонда Һарытау өлкәһе губернаторы Павел Ипатов менән осрашып, эшлекле һөйләшеү үткәрҙе. Төбәк башҡорттары 2003 йылда ҡул ҡуйылған дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек тураһында килешеүҙең үтәлешен ҡараны, ике яҡлы хеҙмәттәшлектең мөһим мәсьәләләре буйынса фекер алышты. Губернатор Павел Ипатов билдәләүенсә, Башҡортостанда ижтимағи-сәйәси хәл тотороҡло, иҡтисад һөҙөмтәле, конкуренцияға һәләтле һәм үтемле ҡорамалдар, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары етештерелә. Агросәнәғәт комплексында ла тулайым һәм удель күрһәткестәр яҡшы. Мортаза Рәхимов әңгәмәлә һуңғы йылдарҙа төбәк-ара бәйләнештәрҙең әүҙемләшеүен әйтеп, шул уҡ ваҡытта төбәктәргә тәжрибә уртаҡлашыу, иҡтисади юҫыкта үҙ-ара эш итеүҙең яңы юлдарын эҙләү, уртаҡ проекттарҙы ғәмәлгә ашырыу йәһәтенән берлектәге тырышлыҡ кәрәклеген билдәләне.

Һарытау делегацияһының Башҡортостандағы сәфәре йомғаҡтары буйынса протоколға ҡул ҡуйылды. Һөҙөмтәлә, ике яҡлы хеҙмәттәшлек аныҡ йөкмәтке, аныҡ проекттар менән тулылана. Был Һарытау өлкәһе губернаторы Павел Ипатовтың Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимовҡа ебәргән рәхмәт хатында йәнә бер дәлилләнә: ”Һеҙҙең менән аралашыу мәнфәғәттәребеҙҙең берҙәмлеген һәм мәҙәни бәйләнештәрҙе, дуҫлыҡты нығытыуға, шулай уҡ сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлекте үҫтереүгә уртаҡ ынтылышыбыҙҙы тағы бер тапҡыр күрһәтте. Үткәрелгән һөйләшеүҙәр Башҡортостан Республикаһы менән Һарытау өлкәһе өсөн күп яҡлы бәйләнештәрҙе артабан үҫтереүгә өҫтәмә нигеҙ булыр, тип ышанам”.

Эйе, Һарытау өлкәһе менән мәҙәни бәйләнештәр йылдан-йыл нығый. Башҡортостанға сәфәр мәлендә Һарытау башҡорттары ҡоролтайы,



башҡорт йәмәғәтселегеге вәкилдәре ”Урал” башҡорт халыҡ үҙәге, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ағзалары менән дә осрашты һәм үҙҙәренең эшмәкәрлеге, яңылыҡтары менән ихлас таныштырҙы.

**Зөфәр Хәкимов, Һарытау өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе:**

— Һуңғы йылдарҙа беҙ һиҙелерлек әүҙемләштек, рухи яҡтан берегеп, аныҡ эштәр башҡарырға, ҡәрҙәштәребеҙҙе тергеҙеүгә һәм үҫтереүгә булышлыҡ иткән сараларҙы ғәмәлгә ашырырға йүнәлеш алдыҡ. Һарытау өлкәһендә башҡорттар ойошоп йәшәгән Перелюб районында ҡәрҙәштәребеҙ туған телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен онотмаған, үҙҙәренә хас һөйләште, үҙенсәлектәрҙе һаҡлаған. Телгә, мәҙәниәткә иғтибарҙы көсәйтеп, халҡыбыҙҙың асылын асып, кимәлен күтәреү, мәртәбәһен арттырыу өҫтөндә эшләйбеҙ. Үрнәккә лә, күрмәккә лә, фәһем бирергә лә зыялыларыбыҙ бар. Әйтәйек, уларҙың береһе, тыуған ерендә, ҡәрҙәштәре араһында йөҙөп йөрөп эшләгәне — Перелюб районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе, ”Сентябрь” ауыл хужалығы кооперативы директоры Харис Йәғәфәр улы Йәүкәев. Телде лә, моңдо ла белә, өлгөлө етәксе, ойоштороусы ла. Билдәле эшҡыуар, Һарытау өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Советы рәйесе Камил Әлим улы Әбләзов та йәшәйешебеҙҙе яҡшыртыуға булышлыҡ иткән арҙаҡлы шәхес. Әйтәйек, ул Һарытауҙа ҙур сығымдар менән ғәйәт күркәм мәсет төҙөтә. Губернаторға инеп, һөйләшеп, ауылдарыбыҙҙа мәктәптәрҙе һаҡлап алып ҡалды. Һис шикһеҙ, ирҙең даны иленән, халҡы менән еренән. Беҙ ир терәге ер икәнен онотмайбыҙ, Кәмәлек буйы аҫаба башҡорттарҙың ил-йорто икәнен төшөндөрәбеҙ. Тарихыбыҙҙы, шәжәрәбеҙҙе танып белеүҙә Әнүәр Закир улы Әсфәндиәровтың ”Һарытау һәм Һамар өлкәләрендәге башҡорт ауылдарының тарихы” тигән китабы ла булышлыҡ итә.

**Әнүәр Әсфәндиәров, тарих фәндәре докторы:**

— Ысынлап та, ауылдар тарихына арналған китаптар бик тиҙ таралып бөттө. Улар ғилми әһәмиәткә генә түгел, рухи, тәрбиәүи әһәмиәткә лә эйә. Рух һүнмәһә, ил үлмәҫ, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит. Һарытау башҡорттары үҙҙәренең аҫаба ерҙәрендә йәшәй, көнитмештәре, яҙмыштары тыуған төйәктәренә бәйле. Шул хаҡта мин тағы ла мәғлүмәтлерәк, даирәлерәк китап әҙерләмәксемен.

**Харис Йәүкәев, Перелюб районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе:**

— Минең йәштәштәремә башҡортса уҡырға насип булманы. Шулай ҙа туған телемдә һөйләшәм, аралашам. Хәҙер балалар ике мәктәптә башҡорт телен факультатив дәрестәрҙә өйрәнә. Әле башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары юҡ. Был мәсьәләне нисек булһа ла хәл итергә кәрәк. Әлбиттә, телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, динебеҙҙе тергеҙеү йәһәтенән башланғыс бар. 2005 йылдың 1 ғинуарынан район гәзите ”Целинник”ҡа ҡушымта рәүешендә айына бер тапҡыр ”Һарытау башҡорттары” тигән башҡортса гәзит сығарыла. Ул ҡәрҙәштәребеҙҙе халҡыбыҙҙың тарихы, көнкүреше, йолалары, арҙаҡлы шәхестәре, шулай уҡ Башҡортостан, районыбыҙ яңылыҡтары, ғөмүмән, башҡорт донъяһы менән таныштыра. Туған телдә гәзит уҡыу — үҙе бер оло ҡыуаныс. Күсембәт ауылы мәктәбендә китапхана эшләй, тыуған яҡты өйрәнеү музейын асырға әҙерләнәләр, байтаҡ экспонаттар йыйылған. Ауылда бик күркәм мәсет

тә төҙөлөп бөтөү өҫтөндә. Ҡәрҙәштәребеҙ тарихи ил-йортобоҙ Башҡортостан менән күп йәһәттән хеҙмәттәшлектең көсәйеүенә шат. Алты бала Өфөлә гимназияла, бер үҫмер сәнғәт училищеһының ҡурай класында уҡый. Ул Октябрьский ҡалаһында үткән ҡурайсылар конкурсында ҡатнашты. Йәштәребеҙгә Өфөлә белем алыу ҙур мәртәбә, ғәйәт ҡәнәғәттәр. Быйыл башҡорт милләтенән егерме алты егет һәм ҡыҙҙың бюджет нигеҙендә Һарытау дәүләт университетына ҡабул ителеүе лә ҡыуаныслы булды. Минең теләк шул: киләсәктә Башҡортостан менән Һарытау өлкәһенең бәйләнеше тығыҙыраҡ булһын, хеҙмәттәшлек милләттәштәрҙе үҫтерергә булышлыҡ иткән ғәмәли эштәрҙә сағылһын, улар Бөтә донъя башҡорттары, Һарытау өлкәһе башҡорттары ҡоролтайҙары барлығын нығыраҡ тойһон.

**Фирҙәүес Хисамитдинова, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры:**

— Былтыр йәйен институттың ғилми хеҙмәткәрҙәре Һарытау өлкәһе Перелюб районында тарихи-этнографик экспедицияла булып ҡайтты. Һәр башҡорт ауылында оло быуын туған телендә үҙ диалектында һөйләшә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, балалар, йәштәр башҡортса насар белә, йә бөтөнләй белмәй. Был туған телдә аралашыусыларҙың йылдан-йыл аҙая, Һарытау башҡорттарының теленән яҙа барыуы тураһында һөйләй. Ассимиляцияға тиҙ биреләләр. Башҡорттар булған олатай менән өләсәйҙең ейәнсәренең исеме Олеся, ейәненең — Вадим. Чечен ауылында булдыҡ. Унда олоһо ла, кесеһе лә үҙҙәренсә һөйләшә. Йәнә татар ҙа, үзбәк тә, сиған да. Милли тойғолары, хистәре, рухтары юғары, ғәййәрҙәр, ғорурҙар. Ә беҙҙең ҡәрҙәштәр йотола. Ә бит, әйткәнебеҙсә, улар ошо ерҙең аҫабалары. Минеңсә, ҡоролтай ошо мөһим юҫыҡта һәммә башҡорт, башҡорт донъяһы бөтөнләгә өсөн эшләргә тейеш.

**Юрий Бычков, Перелюб районының ”Целинник” гәзите мөхәррире, ”Кәмәлек башҡорттары” китабы авторҙарының береһе:**

— Башҡорттар Рәсәй Федерацияһындағы күп һанлы, ҙур көс-көҙрәткә эйә һәм киләсәккә өмөт менән ҡараған милләттәрҙең береһе. Бөтә башҡорттарҙың милли булмышын, йөҙөн, үҙенсәлектәрен һаҡлауҙың, XXI быуатта үҫешен тәьмин итеүҙең ышаныслы гаранты булып Башҡортостан Республикаһы тора. Силәбе, Ҡурған, Төмән, Свердловск, Ырымбур, Һамар, Һарытау өлкәләрендә йәшәгән башҡорттар шуға инана. Сөнки Башҡортостан донъялағы башҡорттарҙы берләштереү, уларҙың мәҙәни-этник ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн оло хәстәрлек күрә. Һарытау башҡорттары ла быны тоя. Улар бөгөнгө тураһында уйлап, киләсәккә бағып, үткәндәргә лә күҙ һала. Тарихты байҡау асылынды төшөнөү, милли үҙаңды нығытыу, булмышынды һаҡлап ҡалыу өсөн мөһим. Йәнә Ырғыҙ, Кәмәлек буйы башҡорттарының тарихы, ижтимағи тормошо дөйөм башҡорт тарихында киңерәк сағылыш табырға тейеш. Шуға ла Фрид Рәшитов менән берлектә ”Кәмәлек башҡорттары” тигән китап яҙҙыҡ. Унда этнографик мәғлүмәттәр ҙә байтаҡ. Хәҙер Һарытау башҡорттары ғәмәлдә Перелюб һәм Пугачев райондарында ойошоп йәшәй. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, башҡорт ауылдарының яҙмышы борсоуға һала, бер нисә ауыл бөтөнләй бөткән, халыҡ һаны аҙайған. XX быуат башында Перелюб районында ете ауыл булһа, хәҙер дүртәү генә ҡалған, башҡорттар 3500 кешенән 1500-гә тик-

лем кәмегән. Әлбиттә, артабан бындай күңелһеҙ күренештәргә юл ҡуйырға ярамай. Беҙ күргән саралар, нәшер иткән китап, ”Һарытау башҡорттары” гәзите был йәһәттән файҙалы, шифалы булыр, тип уйлайым. Сөнки улар йорттарға тел ҡото, мәҙәниәт, сәнғәт яҡтыһы алып килә. Гәзитте почта менән Пугачев районына ла ебәрәбеҙ. Беҙгә уны сығарыу еңелдән түгел. Мәҡәләләр русса яҙылып, башҡортсаға тәржемә ителә. Мөхәррире Тәнзилә Даян ҡыҙы Фәттәхова һүҙлек менән эшләй, мәгәр шымарып, камиллашып, гәзитте уҡымлыраҡ, ҡыҙыҡлыраҡ итә бара.

**Айрат Садыҡов, ”Салауат” Һарытау башҡорт йәштәре ойошмаһы рәйесе:**

— Ойошмабыҙ эш башлағанға инде ике йыл. Ул Һарытау өлкәһенең башҡорт йәштәрен берләштерә. Эш урыныбыҙ — Һарытау ҡалаһының үҙәгендә. Был бик уңайлы. Маҡсатыбыҙ: телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы тергеҙеү, йәштәштәребеҙҙе башҡорт донъяһына әйҙәү, милләтебеҙ тарихи яҡтан бер бөтөн һәм үҙенсәлекле, ҡеҙрәтле милләт булыуына инандырыу, йәш үҫмерҙәрҙе лә милли рухта тәрбиәләү. Уны бойомға ашырыу өсөн төрлө ғәмәли саралар күрәбеҙ. ”Түңәрәк өҫтәл” артында милләтебеҙ яҙмышы хаҡында фекер алышабыҙ, халҡыбыҙҙы танып белеү буйынса конкурстар үткәрәбеҙ. Һарытау ҡалаһындағы Еңеү паркында милли йорт ҡуйҙыҡ. Унда халҡыбыҙ көнкүреше менән танышалар, башҡорт милли кейемдәрен кейеп фотоға төшәләр. Үҙ милләтебеҙҙең ҡыҙегеттәрен таныштырып, өйләндерәбеҙ, башҡорт ғаиләләрен ишәйтәбеҙ. Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөндә бәләкәй ҡәрҙәштәребеҙгә иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙыҡ. Башҡорт студенттарын йәлеп итеп, ”Ағиҙел” футбол командаһы туплаҡыҡ. Беҙҙең көс-ҡеҙрәт — берҙәмлектә, берҙәмдәр бирешмәй, бөтә ҡыйынлыҡтарҙы йырып сыға, проблемаларҙы хәл итә. Быны яҡшы аңлайбыҙ. Тиңдәштәребеҙгә: ”Ҡәрҙәшеңә булыш, уны үҙеңдең кимәлеңә еткер, үҫтер, үҙең дә үҫ, милләтебеҙҙе уҡымышлы, мәҙәниәтле итеп таныт, беҙ күп нәмәгә өлгәшә алабыҙ”, — тибеҙ. Үҙебеҙҙе күрһәтеү, таныҙыу өсөн мөмкинлектәр киң, теләк кенә булһын. Ульяновскиҙа үткән милли мәҙәниәттәрҙең Халыҡ-ара йәштәр ассамблеяһында ҡатнаштыҡ, Рәсәйҙең төрлө милләт вәкилдәре менән аралаштыҡ, тәжрибә уртаҡлаштыҡ, милли мәсьәләләрҙе хәл итеү юлдары менән таныштыҡ. Милли үҙенсәлек һәм мәҙәниәт, рухи ҡиммәттәр, төрлө милләттәрҙең аңлашып, хөрмәт итешеп, һыйышып тыныс йәшәүе, матбуғат баҫмаларында милләт-ара татыулыҡты яҡтыртыу кеүек көнүҙәк мәсьәләләр тикшерелде. Шуға инандыҡ: халҡыбыҙҙың яҙмышы — үҙебеҙҙең ҡулда.

**Әмир Шамаев, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Башҡортостандан ситтә йәшәгән ҡәрҙәштәр менән эшләү комиссияһы рәйесе:**

— Һеҙҙең ҡыуаныслы хәбәрҙәрегеҙгә, һеҙөмтәле эштәрегеҙгә, һынылыш яһауығыҙға бик тә шатбыҙ. Халыҡ әйтмешләй, хәрәкәттә — бәрәкәт, берҙәмлектә — көс. Һарытау башҡорт йәштәре ойошмаһының әүҙемләшеүе ҡыуандыра, ғорурландыра. Ни әйтһәң дә, донъяны дауам итеүсе, алға әйҙәүсе — йәштәр, дәртле, дарманлы йәштәр. Минең теләк: ғаиләләрҙә башҡортса һөйләшеүгә, аралашыуға ныҡыраҡ иғтибар итегеҙ, был хаҡта матбуғатта сығыш яһағыҙ, дәлилле өгөт-нәсихәт алып барығыҙ. Тел, рух балаларҙың һәм йәштәрҙең йәнендә булырға тейеш.